# Урал

Белорет районы һәм ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите

www.ural-rb.ru

Гәзит 1922 йылдан сыға

1 июль 2014 йыл

№ 76 (10868)


| Шш. 1.07 | Шр. 2.07 | Кс. 3.07 | Йм. 4.07 | Шб. 5.07 | Йш. 6.07 |
|---|---|---|---|---|---|
| +7 +15 | +12 +19 | +8 +22 | +11 +23 | +14 +26 | +16 +29 |

| Көндәр | Сыға | Байый | Көн оҙ. |
|---|---|---|---|
| 1 | 05.45 | 22.54 | 17.09 |
| 2 | 05.46 | 22.53 | 17.07 |

27 июндән яңы Ай.

♦ БАЙРАМДАР

# Аэропортта - Йәштәр көнө

*27 июндә аэропортта Йәштәр көнөнә арналған байрам үткәрелде.*





Муниципаль район Советы рәйесе Е.Я. Карепанов йәштәрҙе тәбриkләп сығыш яһаны. Грек-рим көрәше буйынса Рәсәй чемпионы Азамат Бикбаевҡа юл һыуыткысы бүләк иттеләр. Артабан ҡунаҡтар "Американец", "Движение" фитнес-клубтарында шөғөлләнеүселәрҙең бейеүҙәрен, Максим Субботин, рэпер Игорь Кардаш кеүек һәүәскәр йырсылар сығышын ҡарап кинәнде. Магнитогорск ҡалаһынан килгән "Баян-позитив" дуэтының сығышы һәр кемдең күңеленә хуш килде.



Йыр-моңдан тыш шешлек конкурсы ойошторолдо. Григорьевтар командаһы яҡшы әҙерләнгән: тандыр мейесен ҡуйып, ғәрәп ашамлығы "люля-кебаб" бешерҙе. Конкурс һөҙөмтәһе буйынса улар еңде. "Иң үҙенсәлекле әҙерләү ысулы", "Иң үҙенсәлекле әҙерләнеү", "Иң ижади команда" тигән номинацияларҙы ла уларға тапшырҙылар. "Разнодежки" - "Иң тәмле шешлек", Йәштәр советы командаһы "Иң шәп әҙерләүсе" номинацияларына лайыҡ булды. "Полосатики", Ручкиндар командалары ҡатнашҡан өсөн бүләкләнде.

Сарала балалар өсөн күңел асыу аттракциондары эшләне.

**Рәмилә МУСИНА.**
**Автор фотолары.**

# Тырыштарға миҙал эләкте

*Мәктәптәрҙә тағы бер уҡыу йылы тамамланып, һуңғы имтихандар тапшырылып бөттө. Йоҡоһоҙ төндәр, әллә күпме борсолоуҙар кисергәндән һуң, ниһайәт, сығарылыш уҡыусылары ҡулдарына аттестат алыу бәхетенә иреште.*

Был шатлыҡлы көндә ҡайһы бер тырыш уҡыусылар икеләтә шатлыҡ кисерҙе. Уҡыуы буйынса юғары уңыштарға ирешкән, имтихандарын тик «бишле» билдәләренә генә тапшырған һәм рус теле, математика буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарында 70 һәм унан күберәк балл йыйған уҡыусылар Башҡортостан Республикаһының "Уҡыуҙағы айырым уңыштары өсөн" миҙалдары менән дә бүләкләнде. Шулай уҡ миҙалдар уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһының йомғаҡлау этабында еңеүселәргә лә тапшырылды.

Быйыл район-ҡаланан бөтәһе һигеҙ уҡыусыға: 1-се мәктәптән Евгений Пестеровҡа, 8-се мәктәптән Айҙар Абайдуллинға, 14-се гимназиянан Константин Максимовҡа, 17-се гимназиянан Эдуард Мансуровҡа, 20-се мәктәптән ике уҡыусы - Элина Яхинаға һәм Елизавета Третьяковаға, Инйәрҙең 1-се мәктәбенән Иван Молокановҡа, Сермән мәктәбенән Аэлита Әйүповаға миҙал алыу бәхете тейҙе.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

♦ ИҒТИБАР!

# СОЦИАЛЬ ПРОГРАММАЛАРҘА ҮҘГӘРЕШТӘР

Эске, тышҡы туризмды үҫтереү һәм социаль контракт нигеҙендәге ярҙам тураһында

**«Башҡортостан Республикаһында эске һәм тышҡы туризмды үҫтереү» оҙайлы маҡсатлы программаһына үҙгәрештәр индерелгән.**

2014 йылдың 24 июненән "Социаль туризм" ярҙамсы программаһында ҡатнашыу өсөн 2011-2013 йылдарҙа булдырылған сират тәртибе менән заявкалар ҡабул итеlә башлаясаҡ. Ярҙамсы программа Башҡортостан, Рәсәй Федерацияһы һәм сит илдәр буйлап туристик маршрут ҡаралған.

Программала Белорет районы территорияһында йәшәгән һәм теркәлгән 60 йәшкә еткән ирҙәр, 55 йәшкә еткән ҡатындар, инвалидтар, коляскалағы инвалидтар, инвалид балалар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр, күҙе буйынса I төркөм инвалидтары исемле сертификат буйынса ҡатнаша ала. Сертификаттың хаҡы бер путевка өсөн 8 мең һум тәшкил итә. Коляскалағы инвалидтар, инвалид балалар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр, күҙе буйынса I төркөм инвалидтарына, билдәлә килем кимәлөнә иҫәпкә алып (әгәр ҙә пенсионерҙың килем кимәле йәшәү минимумынан 1,5 тапҡырға кәм булһа - 9,105 һум) бер путевкаға сертификат хаҡы 12 мең һум тәшкил итәсәк.

Ярҙамсы программаһында ҡатнашып, сертификат алған кеше маршрутҡа индерелгән туристик ойошмаға мөрәжәғәт итә һәм Башҡортостан Республикаһы шифаханалары, Рәсәй Федерацияһы һәм сит ил буйлап турҙы һайлай ала. Туристик ойошма уның менән килешеү төҙөйәсәк.

Белешмәләр өсөн телефон: 3-26-29. Заявкалар ҡаланың Ленин урамы, 51-а адресы буйынса, 3-сө кабинетта ҡабул ителә.

**Башҡортостан Хөкүмәтенең 2014 йылдың 16 июнендәге 264-се ҡарарына ярашлы, аҙ килемле айырым граждандарға социаль контракт нигеҙендә социаль ярҙам күрһәтеүҙең яңы тәртибе раҫланды.**

Быңдай ярҙам кеше тәрбиәһендә булыуҙы еңеләйтергә, мохтажлыҡта йәшәгән граждандарға адреслы "старт капиталы" һәм дәүләт ярҙамы менән матди хәлен яҡшыртырға ярҙам итәсәк.

Был категорияға ингән граждандар: күп балалы ғаиләләр; тулы булмаған ғаиләләр; ҡарауға бала алғандар; инвалид бала ҡараған ғаиләләр; ире йә ҡатыны, йәки икеһе лә инвалид булған һәм бала тәрбиәләгән ғаиләләр; яңғыҙ йәшәгән, эшкә яраҡлы 18 йәштән 60 йәшкә тиклемге ирҙәр һәм 18 йәштән 55 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙар.

Контракт нигеҙендә социаль ярҙам алырға мөрәжәғәт иткәндә ғаиләнең һуңғы өс айҙағы йән башына тәшкил иткән килеме, балалар менән бергә, Башҡортостанда билдәләнгән йәшәү минимумынан түбән булырға тейеш. Контракт нигеҙендәге адреслы социаль ярҙам бер тапҡыр ғына күрһәтелә. Бирелгән аҡса социаль контрактҡа бәйле саралар өсөн генә тотонолорға тейеш. Кире осраҡта аҡса кире ҡайтарыла.

Социаль контракт 3 айҙан 1 йылға тиклем яраҡлы. Быың буйынса кәрәкле белешмәләрҙе ҡаланың Ленин урамы, 51-а адресы буйынса 4-се, 6-сы, 11-се кабинеттарҙа алырға мөмкин. Телефондар: 4-15-44, 3-35-52, 3-26-29.

**Э. ЗЕКРЕНА әҙерләнә.**

◆ ОСТАЗ



Э.МӨХӘМӘЗИЕВА фотоһы.

# Рәсәй патриоты

**Рәсәйҙә йәштәрҙе патриотик тәрбиәләүҙә әүҙем эшмәкәрлек алып барған граждандарға 2006 йылдан бирле тап Рәсәй көнөндә «Рәсәй патриоты» миҙалы тапшырыла. Ошо юғары исемгә был юлы беҙҙең ҡаланан Николай Иванович ЛУКИН лайыҡ булды.**

Мәғариф өлкәһендә 48 йыл эш стажы булған Николай Иванович 1985 йылдан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан 186-сы уҡсылар дивизияһының 298-се уҡсылар полкы үткән яу юлдары буйлап эҙләнеү эштәре алып бара. Белоретта формалашҡан полктың тарихы эҙәрмәндең тырышлығы һөҙөмтәһендә яҙылды. Николай Иванович уҡыусылары менән йыл да тиерлек Беларусияға барып, полк үткән яу юлдары буйлап йөрөнө һәм билдәһеҙ ҡәберлектән 7 яҡташыбыҙҙы табып, тыуған яғына алып ҡайтып ерләүгә иреште.

Рәсәйҙең ысын патриоты булараҡ, Николай Иванович уҡыусыларына патриотик тәрбиә биреүҙе һәр ваҡыт үҙенең мөҡәддәс бурысы итеп ҡуя. Юғары эрудициялы, киң мәғлүмәтле педагогты коллегалары ла, уҡыусылар, студенттар ҙа хөрмәт итә.

Николай Ивановичты юғары исемгә лайыҡ булыуы менән ҡотлайбыҙ һәм артабан да уңыштар теләйбеҙ.

**З. СӨЛӘЙМӘНОВА.**

◆ ЯҘҒЫ САҠЫРЫУ

# ЕГЕТТӘР китә ил һаҡларға



Автор фотоһы.

**Әлеге ваҡытта илдә егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә саҡырыу бара.**

Быйыл, яҙғы саҡырыу осоронда, Белорет, Бөрйән райондары, Белорет ҡалаһы берләштерелгән хәрби комиссариатынан 212 кеше армияға саҡырыла. Уларҙың 20 проценты юғары белемгә эйә. Армияға киткән егеттәрҙең 51-е ДОСААФ-та уҡып, водитель танытмаһы алған.

Тәүге партияға эләккән егеттәрҙе 14 майҙа оҙатҡан булһалар, иң аҙаҡҡыһы 15 июлгә тура килә.

**Р. МУСИНА.**

# Тәүбәгә килергә  һуң түгел




Камила өләсәһенең һүҙҙәрен иҫләп, ҡайғыға ҡалды.

Бер аҙҙан тағы һөйөнөслө хәбәр алды. Ынйыҡайының улы тыуған! Тик бына ҡыҙының бөтөнләй ҡайтмауына эсе бошто. Бер мәл ҡаты ауырып киткәс, телеграмма һуҡтырып та ҡарағайны. Ҡыҙы посылка һәм хат ебәреү менән сикләнде. Әммә ул бер ҡайтмаһа, бер ҡайтыр, тип ҡыҙының ҡайтыуына өмөтөн өҙмәне.

Түшәккә яҡкас та, елгә шығырлаған ҡапҡа тауышын ишеткән һайын, меҫкенкәй ымһынып, һуңғы һулышына тиклем бер бөртөк кенәһен - Ынйыҡайын көттө...

Һуңлап булһа ла ҡайтты Ынйыҡай. 16 йәш менән барған улы Азаматты үҙе менән алып килде. Тәүге көндә үк әсәһенең етемһерәп ятҡан ҡәберенә барып, күҙ йәштәре аша ғәфү үтенде. Күңеле бушағансы буҫлығып-буҫлығып илап, шатлыҡтарын-ҡайғыларын һөйләп алды. Зыяраттан ҡайтҡас, өйөн йыйыштырып, ихатаны ҡарап сыҡты. Тәүҙә күрше-күлән Ынйыҡайға ҡырын ҡараны, сөнки улар Камила әбейҙең ҡыҙын нисек тилмереп көткәнен белә ине. Оятһыҙ, әсәһен ерләргә лә ҡайтманы, тип тәүбә итеп бармаҡ төрткәндәр ҙә булды. Ынйыҡай кеше һүҙенә иғтибар итмәй, оҫталар яллап йорт-ҡураһын төҙәттерҙе, әсәһенең ҡәберен яңырттырҙы. Шулай итеп, ҡунаҡҡа ғына килгән һымаҡ булған ҡатын әсәһенең өйөндә төпләнеп йәшәне лә китте. Көҙгә улы ауыл мәктәбенә X класҡа уҡырға барҙы. Ҡалала тыуып үҫеп, бөтөнләй сит мөхиттә тәрбиәләнгән егет бында тиҫтерҙәре менән уртаҡ тел таба алманы. Әммә әсәһенең өгөт-нәсихәттәре арҡаһында теләр-теләмәҫ кенә мәктәпкә йөрөнө. Әмәлгә ҡалғандай, ҡаланан тағы бер ғаилә ауылға күсеп килде. Шуларҙың улы Рөстәм менән Азамат бик тиҙ дуҫлашты. Хатта икәүләп ҡалаға йөрөй башланылар. Рөстәм менән дуҫлыҡ Азаматҡа бик килеште. Ауылға килгәндән алып бер асыҡ йөҙ күрһәтмәгән, һәр саҡ кәйефһеҙ, ризаһыҙ йөрөгән егетте алмаштырҙылармы ни. Һәр саҡ ауыҙы йырыҡ, алсаҡ, шаян булып китте. Әсә улының был ҡылығын өнәмәне. Бер аҙҙан ауылға Азаматтың наркотиктар менән булышыуы хаҡында хәбәр таралды. Ысынлап та, егет йыш ҡына уҡырға йөрөмәне, ҡалаға китеп аҙналар буйы юғалып торҙо. Баҡһаң, Ынйыҡай улын наркоман дуҫтарынан ҡасырып үҙенең тыуған яғына алып ҡайтҡан икән.

Ғаиләлә Азамат биш ҡыҙ араһында берҙән-бер малай булғас, артыҡ иркәләнеп үҫте. Атаһы улының теләгенә ҡаршы килмәй, һәр һораған уйынсығын алып бирҙе. Еңмеш, үҙ һүҙле Азамат мәктәптән насар тәртибе өсөн гел шелтә менән ҡайтты. Уға бәләкәйҙән ата һүҙе генә закон, ә үҙе авторитет ине. Азаматҡа 12 йәш тулған йылды атаһы ваҡытһыҙ вафат булды. Ир бала атаһының үлемен ауыр кисерҙе. Ҡайһы саҡта йүгәнһеҙ ат кеүек тотоп алғыһыҙ булып китте, йә үҙ-үҙенә бикләнде. Шул мәлдә урам малайҙары менән беренсе тапҡыр тәмәке тартып та, һыра тәмләп тә ҡараны. 14 йәшендә үҙенән бер йәшкә өлкән Андрей менән танышты. Ул Азаматты тәүге тапҡыр анаша менән һыйланы, уға оҡшап ҡалды. Апайҙары күптән кейәүгә сығып, таралышып бөттө, ә әсәһе көнө-төнө эштә. Иркен өйҙә дуҫтары менән йыйылышып, ҡоторалар. Бер саҡ Андрей уға әфиүн тәҡдим итте. Ошо көндән үҫмерҙәр анашаны әфиүнгә алмаштырҙы. Әсәһенең кеҫә сығымдарына биргән аҡсаһы етмәй башлағас, Азамат өйҙән әйберҙәрҙе урлап һата башланы. Шул саҡ әсәһе улының наркоман булып китеүен белеп ҡалды һәм наркомания ҡосағынан тартып алыу ниәтендә дауаханаға һалды. Әммә егет унан сығыу менән дуҫтарын осратып, тағы элекке хәленә ҡайтты. Ҡара упҡындан, боҙолған дуҫтарынан улын ҡотолдороу өсөн Ынйыҡай уны үҙенең тыуған яғына алып ҡайтты.

Бында ла Азаматҡа йүне килеп сыҡты, хатта үҙе кеүектәрҙән дуҫтар ҙа табылды. Шулай итеп, егет өсөн шаулы-гөрлө, кәйефле тормош дауам итте. Уҡыуын да ташланы, тиҫтерҙәре мәктәпте тамамланы. Әсәһе улын әллә күпме дауаханаға ла һалды, унан сыҡты ла тағы дауам итте. Шулай бер мәл дуҫтары менән ҡалала кәйеф-сафа ҡороп йөрөгәндә, башы томаланып, үҙе лә һиҙмәҫтән 4-се ҡаттан ҡолап төштө. Тере ҡалды, әммә умыртҡа һөйәген һындырып, дауаханала бик оҙаҡ ятты. Табиптар Азаматты башҡаса үҙ аяҡтарында йөрөй алмаясаҡ, тип өйгә ҡайтарҙы. Егеттең йәшәгеһе килмәне, бындай имгәк кемгә кәрәк, тип әжәлен көттө. Ынйыҡай улын сабый кеүек итеп ҡараны. Азаматының ошондай хәлдә ятыуы әсәне көйөндөрһә лә, улының һәр саҡ янында булыуы һөйөндөрҙө. Бер мәл Ынйыҡай әсәһе мәрхүмәнең ҡулъяҙмаларын табып алды, үҙе уны ҡайта-ҡайта уҡып сыҡты. Был әсәһенең көндәлеге ине. Унда ҡатын хыялындағы тормош менән йәшәгән. Йәнәһе лә, янында Ынйыҡайы йәшәй. Уның менән һөйләшкән, кәңәшләшкән, ейән-ейәнсәрҙәрен наҙлаған. Ә бына Ынйыҡайының улы тыуғас, ул нисек шатланған. "Ниһайәт, беҙҙең нәҫелдә лә ир бала тыуҙы! Азамат! Исеме һуң ниндәй!", - тип шул тиклем ейәне менән маһайған. Уға ҙур өмөттәр бағлаған, хатта ауыл әбейҙәрен сәйгә йыйып алған икән. Ә Азамат бит уның тураһында ишеткеһе лә, белгеһе лә килмәй... Әлбиттә, был Ынйыҡайҙың үҙенең хатаһы. Бер түгел биш ҡыҙы бар, йыраҡталар... Әсәләренең хәлдәрен белеп тә китмәйҙәр. Хәйер, ҡыҙҙарыңа ниндәй өлгө күрһәттең һуң, үҙең әсәйең янына ҡайттыңмы, йыш ҡына нимә сәсһәң, шуны урырһың, тип үҙ-үҙен битәрләне.

Азаматҡа ул яйлап ҡына әсәһенең көндәлектәрен уҡый башланы. Тәүҙә егет нимә тураһында һүҙ барғанын аңламаһа ла, айышына төшөнөп алғас, үҙе лә ҡыҙығып китте. Ә инде өләсәһенең ейәне менән нисек ғорурланғанын белгәс, оҙаҡ уйланды... Көндәлек Азаматҡа көс, йәшәүгә дәрт биргәндәй булды. Ул теремекләнеп китте. Йыш ҡына әсәһенән өләсәһе тураһында һөйләүен һораны. Шул мәлдә Азамат өләсәһе ҙур өмөттәр бағлаған нәҫелде дауам итеүсе булыуын аңланы. Тимәк, уға тырышырға, аяғына баҫырға, өләсәһе нигеҙен нығытып, ошонда намыҫ менән йәшәргә кәрәк! Бәлки, өләсәһенең хыялдарын тормошҡа ашырһа, уның рухы уларҙы ғәфү итер...

**Нурия ШӘРИПОВА.**

**(Аҙағы. Башы 74-75-се һандарҙа).**

*Белорет районы таланттарға бай төбәк. Сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәһе буйынса республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә ҙур уңыштар, юғары исемдәр яулаған билдәле шәхестәребеҙ ҙә бик күп беҙҙең. Был йәһәттән район мәҙәниәт идаралығының, ауыл мәҙәниәт йорттары коллективының тырышлығын айырым билдәләп, юғары баһалап китергә булыр ине. Нәҡ уларҙың көсө менән сәнғәткә, әҙәбиәткә хөрмәт тәрбиәләнә, берҙәм, татыу тормошҡа нигеҙ һалына, күрше районлар, ауылдар һәм милләттәр араһында дуҫлыҡ күпере булдырыла, әхлаҡи ҡиммәттәребеҙ нығына ла инде.*

# Мәҙәниәтебеҙ йәшәһә, телебеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа йәшәр

2014
Мәҙәниәт йылы
Год культуры

Мәҙәниәт ул йырлап-бейеп, күңел асып йәшәү генә түгел. Был һүҙгә күп яҡлы һәм тәрән мәғәнә һалынған. Йәмғиәтебеҙҙең йөҙө, йәшәйеше лә бөтә ысынбарлығында мәҙәниәтебеҙ аша сағыла. Ә шулай ҙа, мәҙәниәт өлкәһе, тәү сиратта, кеше күңелен байытыу, уны рухи яҡтан үҫтереү кеүек оло бурысты башҡара тиергә булыр ине. Әлбиттә, был яуаплы эште ул яңғыҙы ғына үтәй алмай. Шуға күрә лә быйылғы йылдың Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителеүе был өлкә хеҙмәткәрҙәре иңенә икеләтә яуаплылыҡ һала һәм халыҡ, йәмғиәт менән килешеп йәшәү, эшләүҙең төрлө юлдарын табырға саҡыра. Үткән йыл көнө Шығай ауылында "Өлкәр" башҡорт мәҙәни үҙәге асылыуы ла ошо маҡсаттан сығып башҡарылған эштәрҙең береһе.

Был көндө Шығай халҡы иҫтәлекле һәм шатлыҡлы ваҡиға кисерҙе. Байрамға төрлө яҡтан ҡунаҡтар саҡырылды, ауыл халҡы йыйылды. Ҡоролған тирмәләр, аҫылған ҡаҙандар һәм шыжлап ултырған самауырҙар байрам кәйефе генә өҫтәп ҡалманы, ә шығайҙарҙың үҙ йолаһын һанлай белгән ҡунаҡсыл һәм дәртле хужа булыуын да күрһәтте. Ҡунаҡтарҙы йырбейеү, сәк-сәк, ҡымыҙ менән ҡаршы алғас, барыһы ла мәҙәниәт йорто ихатаһына ҡуйылған күргәҙмәлә иң оҫта, тилбер ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡул эштәре менән танышты. Үткәл һәм Шығай ағинәйҙәре кейеҙ баҫыу серҙәре менән уртаҡлашты. Шығайҙарға ғына түгел, бөтә район өсөн шатлыҡлы ваҡиғаны бүлешергә Асының билдәле "Еңгәләр", ҡасандыр Париж сәхнәләрен шаулатҡан Сермәндең "Хәтирә" халыҡ фольклор ансамблдәре, Үткәлдең Ағинәйҙәр ҡоро, икенсе өлөшөндә байрамға килгәндәрҙең барыһы ла мәҙәниәт йортонон тамаша залына саҡырылды. Бай концерт программаһы алдынан Шығай ауыл хакимиәте башлығы Р. С. Шәрәфетдинов, мәҙәниәт идаралығы начальнигы З. Ә. Әғләмова, Инйәр район мәҙәниәт йорто директоры О. Б. Овчинникова, Ломовка


Ҡунаҡсыл, дәртле Шығай ағинәйҙәре.

Ломовка, Инйәр ауылының мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре килеүе байрам сараһына мәртәбә, йәм өҫтәне. Сараның мәҙәниәт йорто директоры Л. Ф. Власова барыһын да матур сара менән ҡотланы һәм шығайҙарға үҙ бүләген тапшырҙы. Илнур Әхмәтшиндың, Таңһылыу Вәхитованың, Мәҙинә Йомағужинаның, Илнар Үҙәнбаевтың, Фәриҙә Ноғомановның йырҙары, Мөхәмәт Түлебаевтың, Фидан Сибәғәтовтың ҡурай моңдары, Азамат Муллағәләмовтың, Розалия Шәғәлинаның, Гөлнара Хажинаның, Айзилә Нәбиуллинаның дәртле бейеүҙәре, Шығайҙың "Гөлнәзирә", Сермәндең "Хәтирә", Асының "Еңгәләр", Үткәлдең "Үткәл" халыҡ фольклор ансамблдәренең сығышы тамашасылар күңеленә илһам, дәрт өҫтәне.


Кейеҙ баҫыу еңел эш түгел.


Байрамға Үткәл ағинәйҙәре лә теләп килде.

"Өлкәр" башҡорт мәҙәни үҙәген Шығайҙа булдырыу юҡтан ғына хәл ителмәне. Был ауыл мәҙәниәт йортонон уңышлы эшмәкәрлеге районда яҡшы билдәле. Дәртле, тырыш коллектив эшләй унда. Ауыл халҡы менән бер һүҙҙән булып килешеп эшләүгә, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларыбыҙҙы һаҡлауға һәм йәш быуынды ошо изге эштәргә йәлеп итеүгә лә ҙур иғтибар бүленә. Шуға күрә лә районның "Өлкәр" башҡорт мәҙәни үҙәген Шығайҙа асыу бөтә яҡтан да иң ҡулайлыһы һәм дөрөҫө тип табылды. Төп халҡын башҡорттар тәшкил иткән ауылдың мәҙәниәт йорто ла яңы, матди базаһы ла ныҡлы, телде, башҡорт мәҙәниәтен, традицияларын, ғәҙәтен яҡшы белгән белгестәр эшләй. Шығайҙар төрлө өлкәлә билдәлелек, абруй яулаған ауылдаштары һәм танылған композиторҙары Әбделғәфи Хәлфетдинов, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, донъяның 17 дәүләтендә сығыш яһаған, Ишмулла Дилмөхәмәтов призына үткән конкурста гран-при яулаған мәшһүр ҡурайсылары Мөхәмәт Түлебаев менән дә хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Бөгөн шығайҙар үҙ шәхестәренә тап төшөрмәй,ең һыҙғанып, милләтебеҙ мәҙәниәтен үҫтереүгә тос өлөш индерә. Ғөмүмән, Сәғирә Сабирйән ҡыҙы Шәрәфетдинова етәкләгән Шығай мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре районда бар яҡтан да алдынғы коллектив булараҡ абруй яулаған. "Гөлнәзирә" халыҡ фольклор коллективы, хореографик театр коллективы ҙур уңыштар яулай. Районда Ағинәйҙәр ҡорон булдырыу идеяһын да тәүгеләрҙән булып шығайҙар күтәреп сыҡҡайны. Бөгөн улар был ниәтен дәртләнеп тормошҡа ашыра. Мәҙәниәт идаралығы начальнигы Зәлифә Әхмәҙей ҡыҙы әйтеүенсә, "Өлкәр" башҡорт мәҙәни үҙәгенең иң ныҡлы терәктәренең береһе лә ағинәйҙәр буласаҡ. Улар үҙәктең эшмәкәрлеген артабан үҫтереү, байытыу йәһәтенән был эшкә ныҡлап йәлеп ителәсәк һәм район һабантуйҙарын, төрлө конкурс, фестивалдәрҙе, шәжәрә байрамдарын ойоштороу, билдәле яҡташтарҙың исемен мәңгеләштереү, ҡурайсылар, фольклорсылар бәйгеһен үткәреү һәм биҙәү ҡулланма сәнғәтен үҫтереү буйынса башҡалар менән бергәләп ҙур эш алып барасаҡ. Районда башҡорт мәҙәни үҙәге булдырыуҙың төп маҡсаты ла милләтебеҙҙең мәҙәниәтен пропагандалау һәм үҫтереү, быуындар күсәгилешлеген булдырыу һәм был өлкәләге методика буйынса тупланған тәжрибәне бер системаға һалыу. Ул район буйынса башҡорт халҡы мәҙәниәтенең методик, ижади һәм фәнни лабораторияһы булараҡ эш алып барасаҡ.

Көҙ, ноябрь айында районның Ломовка ауылында рус мәҙәни үҙәген асыу планлаштырылған.


Мөхәмәт Түлебаевтың ҡурай моңо дәртләндерә лә, моңландыра ла.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Автор фотолары.**

# Ҡотлайбыҙ!

741. **УҪМАНОВА (ҒАРИПОВА) Гөлсөм Ильяс ҡыҙына**
Аҙнағол

**Ҡәҙерлебеҙ!** Һине 75 йәшлек күркәм юбилейың менән ҡайнар ҡотлайбыҙ! Бәхетле, бәрәкәтле оҙон ғүмер, сәләмәтлек, ҡартлыҡ көндәрендә шатлыҡ-ҡыуаныста ғына уҙыуын теләйбеҙ. Һәр саҡ шулай беҙҙең терәк-таянысыбыҙ, ҡанатыбыҙ булып ҡал.

Балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең изгелеген күрергә яҙһын. Һиңә барыһы өсөн дә мең-мең рәхмәттәр әйтәбеҙ.

*Ауырыуҙы белмәй йәшә,*
*Бул һаман уҙ көсөңдә.*
*Һине исән-имен күреү*
*Бәхет беҙҙең өсөн дә.*

**Иң изге теләктәр менән - ҡыҙҙарың Әнүзә, Тәнзилә, Шәрифә, кейәүҙәрең Рәшит, Перлепес, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

744. **ЙОМАДИЛОВА Сәүиә Рамаҙан ҡыҙына**
Ҡоҙғон-Әхмәр

**Ҡәҙерлебеҙ!** Һине 55 йәшлек күркәм юбилейың менән тәбриклəп, йөрәк түренән сыҡҡан иң йылы, изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Әсәй! Һин беҙҙең тормошобоҙ мәғәнәһе, донъялағы иң изге йән! Һинең алсаҡлығыңа, тормошто яратыуыңа, йәм табып йәшәй белеүеңә, көслө рухыңа һоҡланабыҙ.

Һин булғанға был донъяла йәшәүе еңелерәк, йылыраҡ, күңеллерәк һәм ҡотлораҡ. Ҡәҙерле кешебеҙгә һаулыҡтың ҡоростай ныҡлыһын, көндәреңдең ҡояштай нурлыһын, ғүмереңдең ҡурай моңондай оҙонон теләйбеҙ. Киләсәктә лә һау-сәләмәт булып, һәр яңы көнөңдө изге уй-ниәттәр менән ҡаршылап, бәрәкәтле матур тормошта бергә-бергә йәшәргә насип булһын.

*Тормош юлдарында*
*атлағанда*
*Һинең менән генә көслөбөҙ.*
*Һин бит, әсәй, беҙҙең*
*арабыҙҙа*
*Иң ҡәҙерле изге кешебеҙ.*
*Ерҙә ҡояш нуры*
*балҡығандай,*
*Һин балҡыйһың беҙҙең*
*күңелдә.*
*Яҡты көндәр, бөтмәҫ*
*ҡыуаныстар*
*Юлдаш булһын гел*
*йәнәшә.*

**Иң изге теләктәр менән - атайың, тормош иптәшең Рамил, улың Дим, киленең Ләлә, ейәнең Салауат, ейәнсәрең Диана.**

740. **ХИСМӘТУЛЛИН Иҡсан Ғофран улына**
Сосновка

Беҙҙең өсөн иң ҡәҙерле, иң ғәзиз **тормош иптәшемде, атайыбыҙҙы** 50 йәшлек матур юбилейы менән ҡайнар ҡотлап, иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Ышаныслы ғаилә башлығы, йәндәй күргән балаларына хәстәрлекле атай, туғандарына ныҡлы терәк була белгән ҡәҙерлебеҙгә байрамы айҡанлы ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, шатлыҡ-ҡыуаныстар, ғаилә усағыбыҙҙың йылыһын һүндермәй, балаларыбыҙҙың шатлыҡ-ҡыуаныстарын, изгелектәрен күреп йәшәүен генә теләйбеҙ.

*Сәләмәт бул, гел йылмайып*
*йәшә,*
*Бәхет күнһын күңелең*
*түренә.*
*Барыбыҙға ҡанат, терәк*
*булып,*
*Талмай атла ғүмер юлына.*
*Йөрәктәрҙән сыҡҡан наҙлы*
*һүҙҙәр,*
*Күңелдәрҙә булған саф*
*хистәр,*
*Оҙон ғүмер, яҡты, тыныс*
*тормош -*
*Беҙҙең һиңә әйтер*
*теләктәр.*

**Иң изге теләктәр менән - тормош иптәшең Зәлиә, улың Илнур, ҡыҙҙарың Лилиә һәм Юлиә.**

747 **БАЙМӨХӘМӘТОВ Руслан Рәмил улына**
Әҙекәй

**Ҡәҙерлебеҙ,** һине күркәм юбилейың - 35 йәшең тулыу айҡанлы ҡайнар ҡотлайбыҙ! Һаулыҡтың ныҡлыһын, ғүмереңдең ҡурай моңондай оҙонон, бәхетеңдең мөлдөрәмә тулыһын теләйбеҙ. Киләсәктә лә беҙҙең терәгебеҙ, таянысыбыҙ булып, әшеңдә уңыштарға ирешеп, оҙон-оҙаҡ йәшә!

*Беҙҙең өсөн ҙур таяныс*
*булып,*
*Оҙаҡ йәшә әле был ерҙә.*
*Йәшәү дәрте, ғаилә*
*ҡыуанысы*
*Ташламаһын һине ғүмергә.*

**Иң изге теләктәр менән - ҡыҙың Русалина, улың Рунар, тормош иптәшең Рәмзиә.**



Н. ВӘЛИУЛЛИНА фотоһы.



| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Дүшәмбе** | | 7 | 14 | 21 | 28 |
| **Шишәмбе** | 1 | 8 | 15 | 22 | 29 |
| **Шаршамбы** | 2 | 9 | 16 | 23 | 30 |
| **Кесаҙна** | 3 | 10 | 17 | 24 | 31 |
| **Йома** | 4 | 11 | 18 | 25 | |
| **Шәмбе** | 5 | 12 | 19 | 26 | |
| **Йәкшәмбе** | 6 | 13 | 20 | 27 | |

## Иҫтәлекле даталар

1 - Архитектура көнө
2 - Халыҡ-ара спорт журналистары көнө
3 - ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре көнө
5 - Халыҡ-ара кооперация көнө
6 - Диңгеҙ һәм йылға флоты эшсәндәре көнө
8 - Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө
11 - Бөтә донъя Ерҙә йәшәгән халыҡтар көнө
13 - Рәсәй почтаһы көнө
- Балыҡсылар көнө
20 - Халыҡ-ара шахмат көнө
- Металлургтар көнө
23 - Ҡәҙер кисе
27 - Сауҙа хеҙмәткәрҙәре көнө
- Хәрби-диңгеҙ флоты көнө
28 - Ураҙа ғәйете

## Һынамыштар

Йәй ҡышҡа ҡарап килә.
Июль - йәшенле ямғырҙар айы.
Болот килгәндә әтәс ҡысҡырһа - көн аяҙытыуға.
Сәскәләр айырыуса хуш еҫле булһа, ямғыр яуыр.
Йәйғор бик юғары булһа - көндәр аяҙға тартыр, түбән булһа -ямғырҙар килер.
Урындан урынға күсеп, төрлө яҡтан күк күкрәһә, боҙ яуыр.
Июлдәге ямғыр тамсыһы алтын бөртөгөнә бәрәбәр.

## ЙОНДОҘНАМӘ

### Ҡысала (22.06 - 23.07)



Ҡысала өйҙә хәстәрлекле, наҙлы һәм яғымлы була. Улар өсөн ғаиләнең мул тормошта йәшәүе мөһим. Ғаилә проблемаларын хәл итеүҙә уның һүҙе мотлаҡ иҫәпкә алына.

Ҡысалалар - һәйбәт психологтар, һәр кемде иғтибар менән тыңлап, ярҙам итеп ебәрә. Улар кескә күңелле, үҙҙәрен күберәк маҡтауҙы, хуплауҙы үҙ итә, тәңкитте ауыр кисерә. Ҡысалалар бушҡа аҡса сарыф итмәй, һаҡсыл, бурысҡа ла биреп бармай. Уның өйөндә һәр саҡ бөхтәлек һәм тәртип.

Ҡысалалар тәбиғәтте ярата, үҙ-үҙенә талапсан, эшһөйәр, тәрән фекерләй белгән хеҙмәткәр, ҡыҙыҡлы әңгәмәсе.

**Ҡысалаларҙың төҫө** - аҡ, аҡһыл зәңгәр, көмөш төҫ.
**Ташы** - зөбәржәт, ҡыҙыл яҡут.
**Бәхетле һандары** - 2, 4, 5, 8.
**Иң яҡшы партнерҙары** - Буға, Балыҡ, Саян, Ҡыҙ.

**ПРОДАМ**

672. **кирпич красный** (кладочный и облицовочный).
**8-909-349-05-16.**

739. **МТЗ разные.**
**8-927-350-67-65.**

673. **профнастил** оцинкованный 7 метров.
**8-909-349-05-16.**

**недостроенный дом** в п. Инзер.
742. **8-927-957-20-05.**

268 **КУПЛЮ**
срубы, лес.
**8-903-311-05-36.**

**ОТСЕВ. БУТ. ЩЕБЕНЬ. Песок. Ассинский камень. Услуги КамАЗ самосвал, экскаватор, погрузчик.**
709. **8-905-181-15-93.**

746 **Уважаемые абитуриенты!**
**БЕЛОРЕЦКИЙ МЕТАЛЛУРГИЧЕСКИЙ КОЛЛЕДЖ**
**объявляет прием студентов на 2014-2015 учебный год**
**на очное отделение**
- на базе основного общего образования (IX классов) по следующим специальностям:
150412 **Обработка металлов давлением**
150408 **Металловедение и термическая обработка металлов**
151031 **Монтаж и техническая эксплуатация промышленного оборудования (по отраслям)**
140448 **Техническая эксплуатация и обслуживание электрического и электромеханического оборудования (по отраслям)**
1440446.06 **Электромонтер по ремонту и обслуживанию электрооборудования (по отраслям)**
150701.01 **Оператор в производстве металлических изделий**
151903.02 **Слесарь**
- сверх контрольных цифр приема (с полным возмещением затрат на обучение, 20000 руб. в год) по специальностям:
080114 **«Экономика и бухгалтерский учет (по отраслям)»**
080118 **«Страховое дело»**
080110 **«Банковское дело»**
030912 **«Право и организация социального обеспечения»**
по заочной форме обучения на базе среднего (полного) общего образования с полным возмещением затрат на обучение по специальностям:
151031 **Монтаж и техническая эксплуатация промышленного оборудования (по отраслям)**
140448 **Техническая эксплуатация и обслуживание электрического и электромеханического оборудования (по отраслям)**
по очной форме обучения на базе среднего общего образования (XI классов) по профессиям по программам квалифицированных рабочих.
150709.02 **Сварщик (электросварочные и газосварочные работы)**
260807.01 **Повар, кондитер.**
**Приемная комиссия работает:**
**пн-пт: с 9.00 - 16.00, сб., вс. - выходной**
**тел.: 2-76-65 и 2-76-68**
**г. Белорецк, ул. Ленина, 131**

Учалы яҙыусылар ойошмаһы, шағирә, Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы **ЗИМИНА-ХУДОВЕКОВА Нина Николаевнаның** мәрхүмә булыуы сәбәпле, яҡындарының, ҡәләмдәштәренең ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Директор-баш мөхәррир - С. Ж. МИНҺАЖИТДИНОВА.**

**ОЙОШТОРОУСЫЛАРЫ -** Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы «Урал» гәзите редакцияһы.

Урал

**Нәшер итеүсе, мөхәрририәт адресы:** 453500, БР, Белорет ҡалаһы, Косоротов урамы, 8

**Мөхәррир (факс)**..........4-28-39
**Яуаплы секретарь, реклама**..........4-28-15
**Иҡтисад бүлеге**............3-14-91
**Компьютер бүлеге**.........4-26-54
**Хаттар бүлеге**..........3-14-89
**Бухгалтерия**..........4-28-33
**E-mail:** URAL_bel@mail.ru

Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында 2014 йылдың 1 апрелендә теркәлде.
Теркәү номеры ПИ № ТУ02-01212
ИНДЕКСЫ: 50621
Гәзит шишәмбе һәм шәмбе көндәрендә башҡортса сыға.
Йыл әйләнәһенә 150 һан баҫыла.

Гәзит редакцияның компьютер үҙәгендә йыйылды һәм БР «Белорет матбуғат йорто» дәүләт унитар предприятиеһында офсет ысулы менән баҫылды.
**Матбуғат йортонон адресы:** 453500, БР, Белорет ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 55/1.
**Тел: 8(34792) 3-07-97**

Ошо билдә аҫтында сыҡҡан мәҡәләләр түләүле, реклама хоҡуғында баҫыла. Реклама һәм иғландарҙың йөкмәткеһе өсөн реклама биреүселәр яуаплы.

Мәҡәләләрҙә килтерелгән фактарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы. Авторҙарҙың фекере мөхәрририәттеке менән тап килмәүе лә мөмкин. **Ҡотлауҙар хаҡы** - 250-500 һум.
**Аҡсаны ебәрергә:** г.Белорецк, ОАО «УралСиб», ИНН0211002046, р/с 40702810600370000161, к/с 30101810600000000770, БИК 048073770, ред. газеты «Урал».

**Күләме** - 1 баҫма табаҡ. **Ҡул ҡуйыу ваҡыты:** 16.00. **Ҡул ҡуйылды:** 16.15. **Тираж: 1410**. **Заказ:** 3130. Һатыуҙа хаҡы ирекле. **Дежур: Э. Мөхәмәҙиева.**